*Иршат ТЕЛӘҮЕМБӘТОВ,*
*журналист*

# ҠАНУН ДИКТАТУРАҺЫ НИМӘ ҺӘМ УЛ СУВЕРЕНИТЕТТАРҒА ҠАРШЫ НИСЕК КӨРӘШӘ?

СССР тарҡалғандан һуң Рәсәй үҙенең биләмәләрен, йәғни шулай аталған «федерацияны», нисек тә һаҡлап алып ҡалырға тырышты. Бәғзе бер халыҡтар, мәҫәлән, чечендар, был хәл менән һис килешергә теләмәне. «Элекке союздаш республикаларҙа йәшәүсе халыҡтар бойондороҡһоҙлоҡ алды, ә беҙ уларҙан кәмме, һаман да шулай икенсе сортлымы?» — тигән урынлы һорау ҡуйҙы улар. Әлбиттә, Борис Ельциндың: «Суверенитетты күпме йота алаһығыҙ, шул тиклем йотоғоҙ», — тигән һүҙҙәрен власть башына менеп ултырыу өсөн генә файҙаланыуы, был хәлдең ваҡытлыса ғына булыуын хәҙер берәү ҙә инҡар итмәҫ. Сөнки быны тормош үҙе раҫланы.

Ысынлап та, Рәсәй тора-бара үҙенең империяһы тарҡала башлауы менән һис кенә лә килешергә теләмәне. (Хәйер, сит илдәр Рәсәй Федерацияһын былай ҙа донъялағы һуңғы колония тип иҫәпләй.) Шул сәбәпле ул, һуңғы һаламға йәбешергә теләгәндәй, һәр төрлө хәйләле аҙымдарға барыуҙан да тартынманы. Мәскәү, иң беренсе сиратта, закондар сығарыу тәңгәлендә инициативаны үҙенең ҡулына алырға теләне. Был аңлашыла, сөнки ул баш бирмәгән республикаларға туранан-тура баҫым яһай йәки агрессия ойошторо хәлендә түгел ине. Кире осраҡта, империя яҙмышын ҡыл өҫтөнә ҡуйған Чечня миҫалдары килеп сығыу ихтималлығын да инҡар итеп булмай ине.

Ысынлап та, бынан бер нисә йыл элек абруйы тамам ҡаҡшаған һәм яралы йыртҡыс хәлендә ҡалған Кремль йә тегендә, йә бында ҡупҡан янғынды һүндереү ҡулынан килмәүен һәм быны көтөлмәгән эҙемтәләр менән барып осланыуын яҡшы аңлап, тактикаһын кинәт үҙгәртергә мәжбүр булды: аҫтыртын ғына үҙенең субъекттарының, йәғни милли республикаларҙың закондарын бар хәленсә үҙенекенә тап килтереү һәм шул юл менән империяны берҙәм закондар нигеҙендә һаҡлап алып ҡалыу эшен башлап ебәрҙе. Ул, мәҫәлән, Удмурт Республикаһында урындағы үҙидараны үҫтереү һәм уға киң вәкәләттәр биреү



05-2001.p65 83 27.07.01, 12:06

идеяһын яҡлап сыҡты. Тыштан демократик күренгән «киң күңелле өлкән ағайҙың» хәйләһе шунан ғибәрәт ине: урындағы властарҙы киң хоҡуҡтар биреү менән ымһындырып, уртансы звено булып торған республика властарын инҡар итеү һәм уларҙы туранан-тура үҙенә буйһондороу. Ләкин Рәсәйҙең ҡасан да булһа тотороҡло һәм камил законлар системаһы эшләп, шуның буйынса әҙәмсә йәшәп алып китеүе үтә икеле. Сөнки ғүмер баҡый батшаларға, тәрлө хакимдарға табынған һәм ҡамсы менән йәшәп өйрәнгән империя халҡының менталитеты алдынғы донъя илдәре халыҡтарынан ҡырҡа айырыла: ул, законларҙан бигерәк, шәхескә табына һәм шул сәбәпле законлар ҙа империя тәхетенә яңы хаким килеү менән түрәнең тирмәненә һыу ҡойоу маҡсатында өр-яңынан яҙыла. Беҙҙең дә, әлегерәк, «киң күңелле Ельцин бабай» властан киткәс, Рәсәй менән милли республикалар араһындағы мөнәсәбәттәрҙең өр-яңы төҫ алыуы ихтимал тигән шик тыуғайны һәм «власть вертикален нығытыу» байрағы аҫтында ул ҡуйып ҡалдырған вариҫ — Путиндың тәхеткә килеүе тап ошоно раҫланы.

Әлбиттә, эште тәүҙә икенсе Чечня кампанияһы ойоштороуҙан башланылар. Бының менән Мәскәү бер юлы ике ҡәмәнең ҡойроғон тоторға булды. Берҙән, әллә ҡасандан бирле тамағына һөйәк булып тығылған Чечен Республикаһын тонсоҡтороп, үҙенең биләмәләренең бөтөнлөгөн тәьмин итеү, икенсенән, бының менән үҙенең субъекттарын ҡурҡытып, уларҙың үҙ ҡанундарын Мәскәүҙекенә һүҙмә-һүҙ тап килтереү. Яҡшыраҡ һәм әҙәмсәрәк йәшәү маҡсатында тиҫтәләрсә йылдар ижад ителгән урындағы ҡанундар тоҡлап-тоҡлап анһат ҡына көсөнән сыға бара. Ләкин урындағы һәм милли үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алмау, барлыҡ ҡанундарҙы ла ниндәйҙер дөйөм тәртәгә керетеү, тигеҙләү, вәкәләттәрҙе тотошлай Мәскәү ҡулына тапшырыу, хатта төпкөл ауылдар тормошон да Кремлдән тороп идара итергә тырышыу төптө булмаҫтай эш. Уның ҡарауы, ил бөтөнлөгөн ошондай юл менән тәьмин итергә маташыу Рәсәйҙе элекке административ-бойороҡ биреүсе унитар дәүләткә, йәғни «халыҡтар төрмәһенә» әйләндереүе көн кеүек асыҡ. Шуныһы үкенесле: сәйәси талаптар ҡуймай, ниндәйҙер үҙаллылыҡ күрһәтһәң дә, Мәскәү бында федерацияны емереү этлеген күрә. Көлкө хәл: былтыр Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышының Законлар сығарыу палатаһы «Тәмәке тартыуҙы профилактикалау һәм уны ҡыҫҡартыу тураһында» Закон ҡабул иткәйне. Изге маҡсаттан сығып ҡабул ителгән был документҡа ла бәйләнеүселәр табылды. Мәҫәлән, былтыр йыл аҙағында Өфөгә «Известия» гәзитенең бер төркөм журналистары килеп ҡайтҡайны. Башҡортостанды, ғөмүмән, милли республикаларҙы, эштең айышына төшөнмәйенсә, Мәскәүҙәге редакция бүлмәһендә ултырып ҡына түпәләргә яратҡан шулар араһындағы Петр Акопов тигән бер «ҡәләм оҫтаһы», был закон кешеләрҙең хоҡуҡтарын ҡыҫа, Рәсәйҙәге законлар системаһының бөтөнлөгөнә ҡаршы килә, тигәнерәк фекер әйткәйне. Бынан аңлашылыуынса, Мәскәү тартыуҙы ташламай икән, беҙгә лә тәмәке хаҡында оноторға хоҡуҡ бирелмәй! Урынлы һорау тыуа: әгәр ҙә мәгәр киләсәктә Рәсәйҙә тәмәке хаҡында беҙҙекеге һымағыраҡ закон ҡабул итеlә ҡалһа (хәйер, быныһына ышанғы ла килмәй!), беҙҙең законыбыҙ ҙа уныҡына тап килтерелерме? Беҙ ҙә тәмәкене Мәскәү биләмәһендә йәшәүселәр менән бер тиң тартырға, улар күберәк тартһа, беҙ ҙә шунса, улар аҙайтһа, беҙ ҙә кәметергә мәжбүр булырбыҙмы!?

Дөрөҫ, Рәсәй һуңғы йылдарҙа федератив дәүләт төҙөү буйынса алдынғы донъя илдәре тәжрибәһенә бик йыш мөрәжәғәт итә башланы. Әммә АҠШ һәм ГФР кеүек илдәрҙең субъекттарының ниндәй ҙур үҙаллылыҡҡа эйә булыуы беҙҙең өсөн һаман матур хыял ғына булып ҡала. Мәҫәлән, АҠШ-тың бер штатында кешене язалау өсөн электр ултырғыстары булһа, икенсеһендә улар бөтөнләй юҡ. Ғөмүмән, һәр штат айырым дәүләт кеүек үҙаллы йәшәп ята, тик берәү ҙә илдең бөтөнлөгөнә ҡурҡыныс янай тип лаф орғаны юҡ.

Бер һүҙ менән генә әйткәндә, Рәсәй империяһы киңлектәрендә ысын федератив дәүләт төҙөү тураһында күпме генә бер үк балыҡ башын сәйнәмәһендәр, был беҙҙең өсөн экиэттәгеләй матур, тормошҡа ашмаҫ хыял булып ҡала. Хәйер, башҡаларҙың тәжрибәһенән түгел, үҙ хаталарынан да өйрәнә белмәгән Рәсәйҙән йүнлерәкте көтөп тә булмай торғандыр.



05-2001.p65 84 27.07.01, 12:06